**Төҙөнө һәм үткәрҙе: I категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Дәүләтбаева Лира Рәис ҡыҙы.**

# Тема.Ҡурай моңо.
# “Исем” темаһын ҡабатлау.
**(6-сы класта интеграцион телмәр үҫтереү дәресе)**

**Маҡсат**: 1.“Ҡурай моңо” әкиәтен өйрәнеү аша ҡурайҙың, ҡурай моңоноң әһәмиәтен билдәләү.Исем темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
2.Телмәр, фекерләү ҡеүәһен,уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү, эҙләнеү күнекмәләрен үҫтереү.
3.Башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу,һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазлау**: китаптар күргәҙмәһе,мультимедиа проекторы, видеояҙма,аудиояҙма, уҡыусыларҙың һүрәттәре, схемалары,дәреслек.

**Дәрес барышы.**

**I.Ойоштороу.**
-Һаумыһығыҙ, балалар! Ултырығыҙ. Дәресебеҙҙе башлайбыҙ.

**II. 1. <u>Ҡурай моңо яңғырай. Башҡортостан тәбиғәте тураһында видеосюжет күрһәтелә.</u>**
**Уҡытыусы Б.Ноғомановтың “ Ҡурай моңо” шиғырын уҡый.**

Моң ағыла…
Күпме йөрәк шул саҡ
Сихри даръяларға күмелә,
Өҙөлөп тә һайрай һандуғасмы?
Көмөш сыңдарымы түгелә?
Уралымда үҫкән ошо ҡурай
Урай-урай күпме илдәрҙе
Киң залдарын алҡыштарға сорнап,
Үрә баҫтырманы кемдәрҙе?
Үҙе ябай бер үҫемлек кенә,
Үҙе эйә сикһеҙ тылсымға.

**2.Теманы, маҡсатты билдәләү.**
**3.Уҡыусыларҙың белешмәләре менән танышыу.**
**4.Әңгәмә.**
-Ҡурай беҙҙең яҡтарҙа үҫәме ?
-Ҡурайсыларҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?
-Беҙҙең яҡта ҡурайсылар бармы?

**5.Ҡурай тураһында уҡытыусы һүҙе.<u>(Мультимедиа презентацияһы.)</u>**

Ҡурай- башҡорт халҡының айырылмаҫ юлдашы ла, моңдашы ла ул.
Сәсәндәребеҙ ҡурай аша халҡында башҡортлоҡ тәрбиәләгән. Бөйөк Салауат батыр ҡурайҙа уйнаған. Ҡаһым- түрә 1812 йылғы Ватан һуғышында Парижға уның өсөн махсус яһалған көмөш ҡурайында уйнап барып кергән.
Ҡурай- ата-бабаларыбыҙҙың моң-зарын, шатлыҡ-ҡыуанысын, ғөмүмән, башҡорт халҡының данлы ла , аяныслы ла яҙмышын, тарихын беҙҙең көндәргә тиклем түкмәй-сәсмәй алып килеп еткереүсе, быуындан-быуынға тапшырыусы изге мираҫ, аманат ул. Бына ни өсөн беҙҙең республикабыҙ гербында ла, флагында ла таҡыя башлы ҡурай һүрәте бар.

Ҡурайҙың нимәнән яһалғанын әйттегеҙ.Бына ул һеҙ әйтеп үткән үҫемлек**.(Слайд)** Бейеклеге 120-170 сантиметр. Ул Урал, Алтай, Саян тауҙарында, Яҡут-Сахала үҫә. Ә музыка ҡоралы булараҡ башҡорттарҙа ғына таралған. Ҡурай, ҡурайсы Ю.Ғәйнетдинов әйтеүенсә, 18 быуат элек билдәле булған.Ҡурайҙың бер нисә төрө бар: ҡурай, ҡыйыҡ ҡурай, сор ҡурай, сүл ҡурайы,еҙ ҡурай. Баймаҡ районында ҡурайға һәйкәл ҡуйылған.

Элек-электән унда сәсәндәребеҙ уйнаған, уны быуындан-быуынға тапшырған, бөгөнгө көндә мәшһүр ҡурайсыларыбыҙ ҡурай данын күтәреү, уны һаҡлап ҡалыу өсөн бик күп көс һалған һәм һала. Ҡурай моңо менән күптәрҙе таң ҡалдыралар.

Бына улар**(слайдтар):**
**Йомабай Иҫәнбаев**
**Ғата Сөләймәнов**
**Ишмулла Дилмөхәмәтов**
**Кәрим Дияров**
**Сәйфулла Дилмәхәмәтов**
**Әҙеһәм Искужин**
**Юлай Ғәйнетдинов**
**Азат Айытҡолов**
**Риф Ғәбитов**
**Ришат Рәхимов**
**Рәсүл Ҡарабулатов**
**Рәмил Ғәйҙуллин**
**Роберт Юлдашев һ.б.**

**6. Й.Иҫәнбаев тураһында Р.Шәкүрҙең “Сыңрау торналар илендә” китабынан өҙөк уҡыу.( Унының Париждағы сығышы.)**
Ғөмүмән,ысын ҡурайсылар борондан килгән ҡурайсылар традицияларын һаҡлайҙар,уның моңон бөтә донъяға танытырға тырышалар, үҙе белгәнде башҡаларға ла өйрәтәләр**.**
**III.“Ҡурай моңо” әкиәте өҫтөндә эш**.
1.Һүҙлек эше( Дәреслек буйынса.)
2.Һорау ҡуйыла: Ни өсөн әкиәт “Ҡурай моңо” тип атала?

**Төркөмдәрҙә эш.**

**1-се төркөмгә эштәр**.
***1****.Өҙөккә исем бирергә.*

***2.****Өҙөк буйынса һорауҙар төҙөргә.*

***3****. Түбәндәге һорауҙарға яуап бирергә.*

***а)****Әкиәттә тасуирланған хәл ҡайҙарҙа бара?Был урындар ниндәй исемдәр менән белдерелгән?*

***б)****Ҡурайсы ҡарттың* *“Ҡурайым менән ҡайғылының күңелен астым, моңһоҙҙо моңландырҙым, дәртһеҙҙе дәртләндерҙем, бәхетленең бәхетен бүлештем”* *һүҙҙәренән сығып , уға ниндәй ҡылыҡһырлама бирә алаһығыҙ?*

**2-се төркөмгә эштәр**.
***1****.Өҙөккә исем бирергә.*

***2.****Өҙөк буйынса һорауҙар төҙөргә.*

***3***. *Түбәндәге һорауҙарға яуап бирергә.*

***а)****Ҡурайсының балалары үҙенә оҡшағанмы? Был турала әкиәттә нимә тип әйтелә? Уны тағы шул уҡ алым менән икенсе төрлө әйтеп буламы?*

***б) ****Малайҙарҙың ҡайһыһы атаһына нығыраҡ оҡшаған?Һүҙҙәрен, ҡылыҡтарын, сағыштырығыҙ.*

**3-сө төркөмгә эштәр**.

***1***.*Өҙөккә исем бирергә.*

***2.****Өҙөк буйынса һорауҙар төҙөргә.*

***3***. *Түбәндәге һорауҙарға яуап бирергә.*

***а)****"... моңһоҙзо моңландырҙым, дәртһеҙҙе дәртләндерҙем, бәхетленең бәхетен бүлештем"һүҙҙәренән сығып, ҡурайҙың ниндәй үҙенсәлеге(үҙенсәлекле сифаты) тураһында әйтеп була?*

***Моңһоҙ, дәртһеҙ, бәхетле*** *исемдәре яһалышы яғынан ниндәй исемдәр?*

***Б)****Кинйәгә ҡылыҡһырлама бирегеҙ.*

***в)****Кинйә ҡурайҙың сихри көсөн дөрөҫ ҡулланамы(үҙенә һәм башҡаларға ҡарата)?Дәлилләгеҙ(Докажите.).*

**IV.Йомғаҡлау.**

1.Ни өсөн әкиәт "Курай моңо" тип атала?

2.Ҡурай моңоноң сихри көсө ҡайҙан килә икән?

3.Ҡурай моңон һаҡлар, ҡурай сәнғәтен үҫтереү өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?

4.Ҡурайға арналған ниндәй байрамдар беләһегеҙ?

5.Ҡурай башҡорт халҡының тормошонда ниндәй урын тота?

6.Был дәрес һеҙгә нимә бирҙе, үҙегеҙгә ниндәй һығымта яһайһығыҙ?

**Уҡытыусы һүҙе**.Дәресебеҙҙе Ш.Бабичтың "Ҡурайға"шиғырынан өҙөк менән тамамлағыһы килә.

Уйна , ҡурай…

Эйе, балалар, ҡурай моңо- ул башҡорт халҡының рухы. Күнелдәребеҙҙе сафландырып, рухыбыҙға көс биреп, уйнаһын да, уйнаһын әле башҡорт ҡурайы!

**Баһалау.**(уҡыусылар үҙҙәре бер-береһенең эшен баһалай.)

**VI. Өйгә эш.**

1.Ҡурай тураһында шиғыр табырға һәм тасуири уҡырға өйрәнергә.

2.“Ҡурай” темаһына тест төҙөргә.

3.“Әгәр ҡурайсы булһам…” темаһына инша яҙырға.